*Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ*

# Башҡорт әҙәбиәте антологияһы

Текстология һәм нәшриәт өлкәһендә әҙәбиәттең иң яҡшы өлгөләрен антология китаптары рәүешендә әҙерләп сығарыу киң таралған. Антологияның төрлө төрҙәре бар: милли әҙәбиәт үрнәктәренә арналғандары, айырым жанрҙарға йәки әҙәби төрҙәргә бағышланғандары, күренекле әҙиптәр ижады буйынса төҙөлгәндәре.

Был йәһәттән башҡорт әҙәбиәтенең дә бер нисә төр антологиялары әҙерләнеп нәшер ителде. 1971 йылда «Башҡорт поэзияһы антологияһы», 1983-1984 йылдарҙа ике томда «XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте», 2000 йылда «Башҡорт шиғриәте антологияһы»ның тулыландырылған һәм байытылған ҙур томлығы донъя күрҙе. «Китап» нәшриәте 1999 йыл аҙағында ике томлыҡ «Башҡорт әҙәбиәте антологияһы»ның беренсе томын баҫып сығарҙы.

Был антологияның үҙенсәлеге шунда, уның томдарына милли әҙәбиәтебеҙҙең боронғо замандарҙан алып XIX быуат аҙағына тиклемге иң яҡшы үрнәктәре һайлап алынған, күпселек текстар башҡорт әҙәбиәте тарихы контексында тәүге тапҡыр баҫыла, ғөмүмән, күп кенә авторҙар, әҫәрҙәр текстологик планда уҡыусыларыбыҙға беренсе башлап тәҡдим ителә.

Шуныһын да онотмайыҡ: хәҙерге ваҡытта милли әҙәбиәтебеҙ, уның тарихы, ауыҙ-тел ижады өлгөләре менән ҡыҙыҡһынған китап уҡыусыларыбыҙ ғына түгел, хатта тарихсылар, фольклорсылар, этнографтар һәм тел белгестәре төрлө архивтарҙа һибелеп ятҡан боронғо, иҫке ҡулъяҙмаларҙы табыу, уларҙы иҫке төрки телендәге ғәрәп графикаһының төрлөсә яҙылышында уҡыу һәм таныу өсөн ҙур ауырлыҡтар кисерә. Өҫтәүенә, әҙәби-тарихи текстарҙы һайлап алыу һәм хәҙерге графикаға теүәл һәм дөрөҫ итеп күсереү үҙе оло бер мәшәҡәтле һәм ваҡ эш. Етмәһә, беҙҙә әле транслитерация принциптары ла тулы эшләнеп бөтмәгән.

«Башҡорт әҙәбиәте антологияһы»ның беренсе томына әҙәбиәтебеҙҙең боронғо замандарҙан алып XVIII быуат аҙағына саҡлы мираҫының һәр дәүере өсөн әһәмиәтле тигән текстары һайланып, транскрипцияланып, хронологик тәртиптә бирелгән. Композицион-структур яҡтан осорҙарға, осор эсендә жанрҙарға, айырым ижадтарға төркөмләп биреү принцибы тотолған.

Антология боронғо төрки әҙәби ҡомартҡы текстары өлгөләре менән асыла: Орхон-Йәнәсәй ташъяҙма үрнәктәре, Йософ Баласағунлының «Ҡутадғу билик» дастанынан фрагменттар, Мәхмүт Ҡашғариҙың «Диуану лүғәт әт-төрк» һүҙлегенән шиғыр, мәҡәл, һүҙ миҫалдары, Әхмәт Йүгнәкиҙең «Һибәт әл-хаҡаиҡ» әҫәренән, «Кодекс куманикус»тан һайланма текстар. Былар төрки халыҡтарының дөйөм уртаҡ әҙәби мираҫы һәм тәү сығанаҡ өлгөләре рәүешендә тәҡдим ителә.



05-2001.p65 200 30.07.01, 10:03

Әҙәбиәтебеҙ тарихының Болғар осоро әйле Ҡол Ғәлиҙең атаҡлы «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы текстары менән башлана. Ҡыпсаҡ осоро, йәғни урта быуаттар әҙәбиәтенән Н. Рабғузиҙың «Ҡиссас әл-әнбиә», «Киҫекбаш китабы», Котобтың «Хөсрәү вә Ширин», Хәрәзмиҙең «Мөхәббәтнамә», Кәтибтең «Жөмжөмә солтан», Сәйф Сараиҙың «Гөлстан бит-төрки», «Сөһәил вә Гөлдөрсөн» дастандарының матур өлөштәре мул ғына алынған.

Боронғо һүҙ оҫталарыбыҙ Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыҙ йырауҙарҙың башҡорт халҡының хәтерендә һаҡланған ҡобайыр, йыр, шиғыр үрнәктәрен тәү башлап баҫтырыу антологияға үҙенсә бер йәм һәм яңылыҡ өҫтәп ебәрә.

Башҡорттарҙың XVI быуаттың урталарынан Рәсәйгә ҡушылыуҙан һуң тарихында, мәҙәниәтендә һәм әҙәбиәтендә башланған Рәсәй осоро әҫәрҙәренән, шәжәрәләрҙән, тауарихтарҙан, «Сыңғыҙнамә»нән, публицистик әҫәрҙәрҙән, сәсәндәр ижадынан өлгөлө текстар һайлау милли әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөн, күркен асыҡ тойорға, зауыҡ алырға киң мөмкинлек бирә.

Салауат Юлаев ижадынан өлгөләр, «Исмәғил аға сәйәхәте», «Мәжмуғ әл-хикәйәт», аноним поэзиянан үрнәктәр, нәсихәттәр, Мәүлә Ҡолой хикмәттәре, Тажетдин Ялсығол китабынан әҙәби миҫалдар, Ғәбдерәхим Усман поэзияһы башҡорт әҙәбиәте антологияһының XIX быуатҡа тиклемге осоро ла халыҡсан таланттарға, жанрҙарға, поэтик ынйыларға бай икәнлеге хаҡында һөйләй.

Антологияға бирелгән инеш һүҙ китаптың үҙенсәлеген аңларға, текстологик эштең принциптарын төшөнөргә, текстар теленең хөсүсиәтен тойорға ярҙам итә.

Һәр бер һайланма ҙур әҫәргә, йыраусыға, сәсәнгә, шағирға, әҙипкә ҡыҫҡаса белешмә биреү, ижадтарының, айырым әҫәрҙәренең үҙенсәлектәрен билдәләп үтеү, иҫкәрмәләр антологияның әһәмиәтен күтәрә.

XI-XVIII быуаттар һуҙымындағы оҙон тарихи осорҙо үҙ эсенә алған «Башҡорт әҙәбиәте антологияһы»ның беренсе томы составы, әҙәби төрҙәре һәм жанрҙары менән төрлө-төрлө, үҙенсә бай, һайланған текстары үрнәк булырлыҡ.

Был антология башҡорт әҙәбиәте уҡытыусылары, филология факультеты талиптары, төрлө йүнәлешле ғалимдар һәм башҡорт әҙәбиәте тарихы менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн һәйбәт бүләк булып тора. Ул милли интеллигенцияның өҫтәлендә ятырлыҡ, китап кәштәһен биҙәп торорлоҡ матур баҫма.






05-2001.p65 201 30.07.01, 10:03